ӘБЙӘЛИЛ БАЛАЛАРЫНЫҢ ЙЫРЫ

Сания Мортазина музыкаһы
Салауат Сәлмәнов эшкәртеүендә

Ҡыҙыл менән Ҡырҡты буйҙарында
Нурҙар сәсеп ята Әбйәлил...
Был ерҙең беҙ көләс балалары,
Был ер – беҙҙең гөрләп үҫкән ил.

Был ерҙе беҙ йәнә йәмләр өсөн,
Данлар өсөн тыуҙыҡ – теләк бер.
Атайҙарға ныҡлы таяныс беҙ,
Әсәйҙәргә ныҡлы терәк беҙ.

Был ерҙең беҙ лайыҡ вариҫтары,
Ошо ерҙең бәхет-ҡото беҙ...
Баҡса итер өсөн тыуған ерҙе
Олатайҙар рухын оттоҡ беҙ.

Ҡыҙыл менән Ҡырҡты буйҙарында
Йәйрәп-иңләп ята Әбйәлил...
Ошо ерҙең беҙ шат балалары ,
Әбйәлил ул – беҙҙең һөйгән ил.

Әсхәл Әхмәтҡужиндың тыуған яҡ, Асҡар ауылына арналған шиғырҙарына башҡорт композиторҙарының йырҙары һәм романистары тупланмаһы

Асҡар 2021

Төҙөнө: үҙәк район китапханаһының библиографы - Абушахманова Д.Ш.

МБУК “Үҙәк район китапханаһы”
Әбйәлил МР
Мәғлүмәт-библиография бүлеге

Тыуған еренә дан йырлаусы

библиографик ҡулланма



Республикабыҙҙың Ғәлимов Сәләм, Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге, Бәләбәй ҡалаһының Фәтих Кәрим исемендәге төбәк-ара, Әбйәлил районының әҙәбиәт өлкәһендә Ким Әхмәтйәнов исемендәге һәм Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев-Балапанов исемендәге премиялар лауреаты, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың мәғариф отличныгы, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры, Әбйәлил районының Почетлы гражданы шағир һәм тәржемәсе Әсхәл Әхмәт –Хужаның был библиографик ҡулланмаһына концерт залдарында, радиола, телевидениела йыш яңғыран романстары, һәм көндәлек тормошта – клуб сәхнәләрендә, мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында ололар ҙа, кеселәр ҙә яратып башҡарған йырҙары һәм романстары тупланды.

ТЫУҒАН ЯҒЫМА

Камил Ниғмәтов музыкаһы
Салауат Сәлмәнов эшкәртеүендә

Ожмахһың тип күкрәк ҡаҡмайым,
Шыҡһыҙһың тип яла яҡмайым –
Күҙ алдымда бары һаҡлайым
Һәр саҡ һине, тыуған яҡҡайым!

Ҡыҙылың да көмөш һыу түгел,
Ҡырҡтытауың алтын тау түгел,
Муйылдарың ләкин ҡыу түгел,
Һиндә генә минең һау күңел.

Һәр йәмеңә ғашиҡ малайың –
Урманыңды туймай айҡайым:
Кәкүк зарыҡтырып, таң һайын
Көтә мине күпме аҡ ҡайын.

Болоноңда сәскә гөл-генә –
Һуштарымды ала гел генә,
Яҡын килһәм, һөйләй сер генә,
Тик гөл телен тыңлай бел генә:
“Бәхетем, - ти, - берҙән-бер генә-
Йәшәргә көс биргән ер генә!”

ҠЫҘЫЛ МЕНӘН ҠЫРҠТЫ БУЙҘАРЫ

Рафиҡ Сәлмәнов музыкаһы

Ҡайҙа барһам, ҡайҙа йөрөһәм дә,
Бер моң сыңлай йәндә һыҙылып:
Бар һыуҙарҙан тәмле Ҡыҙыл һыуы,
Бар йылғанан йәмле Ҡыҙылым.

Ят илдәрҙә күпме йәшәһәм дә,
Ят яҡтарға ятмай күңелем:
Ер шарының барлыҡ тарафынан
Ҡырҡтытауым тора күренеп.

Өндәремдә –иҫтә, төнөн төштә
Йәшлек сағым уҙған яҡты ил:
Һағындыра, өҙөлөп һағындыра
Ҡыҙыл буйы, Ҡырҡты, Яҡтыкүл.

ӘБЙӘЛИЛ

Айрат Ғайсин музыкаһы

Әбйәлилдә тауҙар офоҡтарҙы
Асманғаса тора таятып,
Ә далалар Себер киңлегенә
Тоташҡандар монар тағатып.

Бейеклектәр менән сикһеҙлекте
Ҡауыштырған бында ниндәй көс?!
Тауҙар сәмен, үҙәндәрҙең ғәмен
Табыштырған бында ниндәй хис?!

Ул хис, ул көс – беҙҙең йөрәк уты,
Ул хис, ул көс – беҙҙең яҡташтар,
Беҙ булғанға – дала алтын игә,
Хазиналар һибә күк таштар.

Әбйәлилдә күлдәр, диңгеҙ кеүек,
Аҡ елкәндәр ҡыуа, сайҡалып.
Урмандарға керһәң, ҡоштар кеүек,
Йырлап ебәрәһең, таң ҡалып.

Зәңгәр сафлыҡ менән йәшеллекте
Ҡауыштырған бында ниндәй көс?!
Аҡсарлаҡтар менән былбылдарҙы
Табыштырған бында ниндәй хис?!
Ул хис, ул көс – беҙҙең йөрәк уты,
Ул хис, ул көс – беҙҙең яҡташтар,
Беҙ булғанға – күлдәр көмөш һыулы,
Бал еҫтәре бөркә ағастар.

Ер йөҙөндә Әбйәлилдә, ахыры,
Ожмахтарға тиңдәш сәхрәләр,
Башҡортостан гөл баҡсаһы икән,
Беҙҙә үҫә иң хуш сәскәләр.

Матурлыҡтар менән батырлыҡты
Ҡауыштырған бында ниндәй көс?!
Ҡурай моңо менән йыр-бейеүҙе
Ярыштырған бында ниндәй хис?!
Ул хис, ул көс – беҙҙең йөрәк уты,
Ул хис, ул көс – беҙҙең яҡташтар,
Әбйәлилдә тыуыу оло бәхет,
Беҙҙең яҙмыш бында уҡмашҡан

ТЫУҒАН ЕРЕМ

Хөсәйен Әхмәтов музыкаһы

Шоморт күҙле тыуған илем,
Шоңҡарлы ҡаялары.
Ҡаяларға тамға һалған
Тарихтың саялары.
Көңгөрт күҙле аҫыл илем,
Бал еҫле лә урмандарың.
Яҡты тормош яулап алған
Баһадир уландарың.

Зәңгәр күҙле гүзәл ерем,
Йырлы йылға-күлдәре.
Ҡуйыныңда мәгдәндәрең,
Ҡосағыңда гөлдәрең.
Нурлы күҙле башҡорт ере,
Киң сәхрә далаларың.
Һиндә тиңһеҙ бәхет төҙөй
Йөҙ милләт балалары.

ҠЫҘЫЛЫМ

Зөһрә Фәйзуллина музыкаһы
Салауат Сәлмәнов эшкәртеүендә

Ҡыңғыраулы ҡолонсаҡтай,
Төнөн дә ул йор.
Шаршыһында, ал мунсаҡтай,
Йылҡылдай йәйғор.

Ҡушымта:
Сылтыр-сылтыр тарих һөйләп,
Аға ла аға.
Ярын түгел – кешеләрҙең
Күңелен ҡаға.

Сылбыр-сылбыр тулҡындарын
Уй-хискә әлә.
Һыу арбаған муйылдары
Бейейҙәр елдә.

Ҡушымта:
Еремә йәм, йән индергән
Эй гүзәл йылға!
Елегемә май һеңдергән
Ул оҙаҡ йылға.

Ҡая ҡырҡып, Ҡырҡтытауға
Сәстәй уралған...
Мин бит унан китә алмайым,
Ә ул – Уралдан.

Ҡушымта:
Сылтыр-сылтыр тарих һөйләп,
Аға ла аға.
Ярын түгел – кешеләрҙең
Күңелен ҡаға.

ӘБЙӘЛИЛ ГҮЗӘЛДӘРЕ

Сания Мортазина музыкаһы
Салауат Сәлмәнов эшкәртеүендә

Көн тип тормай, төн тип тормай,
Сылтыр-сылтыр серен һөйләй
Ҡыҙылдың һыуы.
Сылтыр тауышҡа ҡушылып ,
Йөрәк һағыштарын көйләй
Ҡыҙыл һылыуы.

Яҙ тип тормай, көҙ тип тормай,
Йәшнәп-йәшнәп тарих әйтә
Ҡырҡтыла һәр таш.
Сая тарихҡа ҡушылып,
Һөйөү уттарын йәшнәтә
Сибәр ҡараҡаш.

Һил тип торма, ел тип тормай,
Саҡма ярҙарға бәрелә
“Өскүл” дә тулҡын...
Әбйәлилдең гүзәлкәйе
Хистәрен арнай йәренә,
Хистәре упҡын.

ҠЫҘЫЛ БУЙЫ ҠЫҘҘАРЫ

Сания Мортазина музыкаһы
Салауат Сәлмәнов эшкәртеүендә

“Һеҙҙең яҡта ниндәйерәк
Иҫәләр, - тиһәң, - елдәрҘ” –
Елдәр беҙҙә гөл еҫлеләр:
Сөнки бар беҙҙә Гөлдәр.

“Һеҙҙең яҡта ниндәй сәскә
Туғайҙарға йәм бирәҘ” –
Тип һорамаң, серҙе сисәм:
Нур-йәм бирә Гөлсирә.

Беҙҙең яҡта, Гөлсирәләй,
Гел сибәр ҡыҙҙар булғас, -
Иртә-кисен туғайҙарҙа
Иҫереп һайрай һандуғас.

Беҙҙең яҡта, Гөлдәр кеүек,
Сәскәләй ҡыҙҙар барҙа, -
Иҫертерлек, иҫ китәрлек
Елдәр иҫә таңдарҙа.

ГҮЗӘЛ ЙЫЛҒАМ ҠЫҘЫЛЫМ

Сания Мортазина музыкаһы
Салауат Сәлмәнов эшкәртеүендә

Ҡыңғыраулы ҡолонсаҡтай,
Төнөн дә ул йор,
Шаршыһында, ал мунсаҡтай,
Йылҡылдай йәйғор.

Ҡушымта:
Ҡая ҡырҡып, Ҡырҡтытауға
Сәстәй уралған...
Мин бит унан китә алмайым,
Ә ул –Уралдан.

Сылтыр-сылтыр тарих һөйләп,
Аға ла аға,
Ярын түгел, кешеләрҙең
Күңелен ҡаға.

Ҡушымта:
Сылбыр-сылбыр тулҡындарын
Уй-хискә әлә,
Һыу арбаған муйылдары
Бейейҙәр елдә.

Ҡушымта:
Еремә йәм, йән индергән,
Эй гүзәл йылға!
Елегемә май һеңдергән
Ул оҙаҡ йылға!

Ҡушымта:

АСҠАР БАҠСАҺЫ

Рафиҡ Сәлмәнов музыкаһы

Йәшлек таңдарыма бер ҡараһам,
Һағыш тулы йөрәк менән баҡһам,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Йәшел суҡлы яулыҡ болғай баҡсам,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Йәшел суҡлы яулыҡ болғай баҡсам,
Аҡ ҡайынлы баҡсам.

Бейек ҡояшыма көлөп баҡһам,
Ғүмерем ҡаяһына мереп баҫһам,
Йәшел суҡлы яулыҡ болғай баҡсам,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Гөл сигелгән яулыҡ болғай баҡсам,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Гөл сигелгән яулыҡ болғай баҡсам,
Аҡ ҡайынлы баҡсам.

Ҡар-ямғырлы юлдарыма баҫһам,
Күҙ йәшемде саҡ-саҡ тыйып барһам,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Һары ебәк яулыҡ болғай баҡсам,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Онотолмаҫ тәүге йәрем кеүек,
Һары ебәк яулыҡ болғай баҡсам
Аҡ ҡайынлы баҡсам.

АСҠАР АУЫЛЫНА ЙЫР

Айрат Ғайсин музыкаһы

Зөбәржәтен теҙеп йәшел йәйҙең,
Ынйыларын йыйып аҡ ҡарҙың,
Иҙәш туғайында йәйрәп ята,
Аҡ баҡсалы гүзәл Асҡарым,
Гөл баҡсалы гүзәл Асҡарым.

Алмас-тауым, алмас кеүек балҡып
Һағыштарҙы ала аҡтарып.
Алыҫтарҙан үҙенә саҡырып тора
Аҡ баҡсалы гүзәл Асҡарым,
Гөл баҡсалы гүзәл Асҡарым.

Таңатарҙың йәшмә ярҙарында
Йәшнәп үтте йәшлек саҡтарым.
Мәрмәр тәнле ҡайындары менән
Әсир итә гүзәл Асҡарым,
Гөл баҡсалы гүзәл Асҡарым.

Аҫылташтар, аҫыл заттар иле,
Бәхет иле –тыуған яҡтарым.
Әбйәлилем –алтын йөҙөк икән
Йөҙөк ҡашы бит ул Асҡарым.
Аҡ баҡсалы гүзәл Асҡарым,
Гөл баҡсалы гүзәл Асҡарым.